# Йомактар

x x x

1. Такыр тауҙа тәкә уйнай.

2. Бәләкәй генә бөкөрө
Иыһан ерҙе бөтөрҙө /урак/.

3. Бәләкәй генә биҙәр
Иыһан ерҙе гиҙәр/урак/.

4. Таш кала,
Таш кала эсендә тимер кала.
Эсендә һөйәкһеҙ бала
/мейстәге икмәк/.

5. Әй әфтисук,
Әфтисукта такта сук,
Такта сукта биш ботак,
Биш ботакка кар яуған,
Кар өҫтөнә кан тамған.

6. Апсык- апсык алама сапан,
Дүрт терәүес, бер болғауыс,
кәкере кондоҙ,
якты йондоҙ.

7. Сытырык-мытырык араһында
Хандың кыҙы юл һала.

Зианчура районы Үрген ауылы Култыев
Хәмзәнән.

8. Ятһа куяндай,
Торһа дөйәләй /шаршау/.

9. юткерһә- тәкәрә,
Тәкәрһә - үлтерә /мылтык/.

10. Биле кайкы, үҙе үткер /кылыс/.

11. Иомағым- йомак,
Карасәй борсак.

12. Аяғы юк-йөрөй,
Канаты бар-осмай /балык/.

13. Кат-кат тунлы, карыш буйлы / кәбесҭә/.

14. Тәҙрәһе юк, ишеге юк,
Эсе тулы халк /карбуз,кауын/.

15. Ер асҭында алтын каҙык /кишер/.

16. Ағастан-заты,
Тимерҙән каты,
Һыу өсҭөндә мәлдәте,
Бер алланың көҙрәте /паром/.

17. Тәҙрәнән тәҙрәгә алтын орсок
Үткән / йәшен/.

18. Үҙҙәре мине теләйҙәр,
Күренһәм касалар /ямғыр/.

19. Ун унға бирә,
Ун утыҙға бирә,
Утыҙ тәләпәскә бирә,
Тәләпәс ярҙан осора

/Кул-кулға,кул-ауыҙға,
ауыҙ ашкаҙанға.../.

20. Зәңгәр диңгеҙ өҫтөндә
Акһыл каҙҙар йөҙәләр /болоттар/.

21. Һыуҙа батмай,
Утта янмай /боҙ/.

22. Тышка өйһәң,тау була,
Өйгә өйһәң,һыу була /кар/.

23. Ялтырай, күҙ кыҫа,
Кемделер сакыра/кояш нуры/.

24. Һалпы колаклы,
Тулы битле,
Һөйләшерлә бик ипле.

25. Мөтрөй башлы,
Мең күҙле /уймак/.

26. Мейес тулы бәрәмәс,
Уртаһында бер калас
/ай, йондоҙҙар/.

27. Оло аҙбарҙан кесе аҙбарға һәш
түгә! / мейестәге ут-усакка/.

28. Ағас пулат,
Ағас пулат эсендә таш пулат,
Таш пулат эсендә тимер пулат,
Тимер пулат эсендә түңәрәк күл,
Түңәрәк күл эсендә һөйәкһеҙ балык
/өй, мейес, таба, май, коймак/.

29. Ары ла лап-лап,
Бире лә лап-лап,

Һеңгә һаплап,
Кейеҙ каплап //ашлык һуғыу/.

30. Канаты бар-йөнө юк,
Үҙе бара-юлы юк /самолет/.

31. Килтерҙем,һөйәй алманым /юл/.

32. Өй әйләнәм кыл аркан /мүк/.

33. Ямауы бар,йөйө юк/ ала һыйыр/.

34. Бер инәгә биш бала,
Бишеһенә биш исем/бармактар/.

35.һары бейә, һаҙға һейә/самауыр/.

36. Тәпәш күктән кар яуа/ он иләү/.

37. һоҫоп алдым урыны юк /һыу/.

38. Тимер сыпсык, һүҫ койрок/энә, еп/.

39.Таба-таба табалама,
Такыр юлдан юрғылама,
Кеше күрһәң кешнәмә,
Үлән башын тешләмә/салғы/.

40. Еҙ аласык эсендә еҙнәм
аты кешнәй /кыңғырау/.

41. Атаһы утын кырккансы
Улы Оронборҙан урай /оскон, төтөн/.

42. Бер һыйырҙың койроғона
Мең кеше йәбешә/ишек тоткаһы/.

43. Биш бүрәнәнән өй һалғандар /бәйләм/.

44. Уртаһында ут, тирә яғы һыу /самауыр/.

45. Кәштәм тулы ак шәшке/тештәр/.

46. Өй башында-йәшел каҙ,
Йәшел каҙҙың башы таҙ
/мунса япрағы минлек/.

47. Дурт ағай
Берен береһе кыуалай /тәгәрмәстәр/.

48. Ике ағай торалар,
Берен береһе курмә ҙәр/ күҙҙәр/.

49. Баҙырыуы өҙөн, көлтәһе кыҫка /һайыҫкан/.

50. Хан кыҙы һыуға бара,
Беләҙеге төшөп кала,
Ай күреп кала,
Кояш тотоп ала/кырау,ысык,томан/.

51. Урмандан сығар,
Койроғо сыбар /тумыртка/.

52. Дурт кешегә бер яулык
/өҫтәл аяктары/.

53. Кәкере-бөкөрө,
Башында кәкәй-бөкәй ултыра,
Бөгөн генә килмәһәң,
Иртән китәм тип ултыра
/комалак/.

54. Бөгрәй бара, мөгрәй бара,
Мөгөҙөн күккә терәй бара,
Камышлыкка төшә бара,
Камыш һыуын эсә бара
/томан төшөү/.

55. Иоморо башлы, мең күҙле/ уймак/.

56. Үзбәктең үҙ улы үҙен тотоп ултыра,
Үзбәк кара һакаллы көҙгө тотоп ултыра,
Көҙгө- һылыу быяла,
Төштө ниһә ыуала
/мейес,торба, кумер/.

5.. Икәү ята, икәү тора,

Икәү генә йөрөй /ишек/.

58. Таяк,

Таяк башында табак,

Табак өҫтөндә кыуак,

Кыуак эсендә мең егет /көнбағыш/.

59. Ике усакка бер киҫәү /һыйыр теле/.

60. Кәштә башында һоло икмәге/таҙ/.

61. Бәләкәй генә мөлдө

Миңә карап көлдө /көҙгө/.

62.Бер ағаста ун ике ботак,

Ун ике ботакта-

өйҙ

Өс алтмыш алтмыш алты япрак

/ Бер йыл, 12 ай, 366 көн/.

63.Килтерҙем,

Калдыра алманым /күләгә/.

64. Алашак тирәк,

Кырк ботак,

Ботак һайын оя,

Оя һайын кыркар йомортка /борсак/.

65. Аяҙ көндә арттан калмай

Күләгә/.

66. 360 сыйырсык,

48 тубырсык,

12 аккош,

1 торна / йыл хисабы/.

67. Дурт татар биҙрә төбөнә атар

/имсәктәр/.

68. Ике татар аяк ослаш ятар /каш/.

69. Арьякта ла йөҙ йылкы,
Бир якта ла йөҙ йылкы,
Тибешә лә талаша /керпектәр/.

70. Урманда-кара,
юлда-кашка,
Өйгә кайтһа, ағара /юкә ағасы/.

71. Ак кына кәсәгәм кан коҫа/ сәйнук/.

72. Оло ағай һуҙылып яткан
Балалары теҙелеп яткан
/өрлөк,түбә такталары/.

73. Ана бара,юлы кара
/ер һөрөү/.

74. һңар аяк һайыҫкан
Койоға төшкән һыу эскән/сумес/.

76.Үҙе генә ашалмай,
Унан башка аш бармай /тоҙ/.

77. Аркаһы бар түше юк,
Аяғы бар, кулы юк/ултырғыс/.

78. Уртаһы көмөш,
һары ағас / көҙгө/.

79. Иәнленән йәнһеҙ тыуа,
Иәнһеҙҙән йәнле тыуа
/йомортка/.

80. Аттан бейек,
Эттән тәбәнәк /эйәр/.

Рәши Ғарипов
Өфө-Мәскәү.